*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Моң алиһәһе



*Ташты күңелем, акты йәнем,*
*Белмәйем һуң, нишләйһе?*
*Фәриҙәнең күкрәгендә*
*Барҙыр йырҙар шишмәһе.*
Ғ.Хәкимйән, Финляндия

Башҡорт йыр сәнғәтендә исемдәре ынйылай балҡыған абруйлы шәхестәр байтаҡ. Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Хөсәйен Әхмәтов, Заһир Исмәғилев, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Сөләймән Абдуллин, Абдулла Солтанов, Баныу Вәлиева, Әсмә Шайморатова, Хәбир Ғәлимов, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Рамаҙан Йәнбәков, Бәхти Ғайсин кеүек сәнғәт әһелдәре башҡорт моңон өр-яңы бейеклеккә күтәрҙе, үҙ йөрәге аша үткәреп, тағы ла байытты. Ошо абруйлы исемдәр араһында аҡыҡтай балҡыған Фәриҙә Ҡудашева иһә үҙенең ҡабатланмаҫ моңо менән меңдәр күңелендә мәңгелеккә урын алды. Ул йырлаған йырҙарҙы үҙен бик талантлы тип иҫәпләгән йырсы ла йырларға ҡыймай. Сөнки Хоҙай бүләк иткән моңдо Фәриҙә апай кеүек үҙ йөрәге аша үткәреп халыҡҡа еткереү таланты һәр кемгә лә бирелмәйҙер ул.

”Ашҡаҙар”, ”Илсе Ғайса”, ”Сәлимәкәй”, ”Хисам”, ”Мәҙинәкәй”, ”Рәйхан”, ”Һыу буйлап”, ”Һибелә сәсәк” кеүек халыҡ көйҙәрен, ”Һағыш”, ”Һағынам, дуҫтар, илкәйҙе” (халыҡ һүҙҙәре, Фәриҙә Ҡудашева көйҙәре), ”Йөрәк сере” (Илсөйәр Ғәниева һүҙҙәре, Сара Садиҡова көйө), ”Ағиҙелдә аҡ томан” (Назар Нәжми һүҙҙәре, Нариман Сабитов көйө), ”Юҡһыныу” (Сәйфи Ҡудаш һүҙҙәре, Хөсәйен Әхмәтов көйө), ”Көтәм һине” (Шәриф Бикҡол һүҙҙәре, Рәүеф Мортазин көйө), ”Тауҙар юлы” (Назар Нәжми һүҙҙәре, Заһир Исмәғилев көйө) һәм башҡа ғәжәйеп сихри йырҙар тап уның башҡарыуында ғына алты тиҫтә йылдан ашыу яңғырай, уларҙы тыңлаған һайын тыңлайһы, йырсының сихри моң дарьяһында күңелдәрҙе киндерәп йөҙгө килеп тора.

Фәриҙә Ҡудашева йырлай. Ул түгел, халыҡ йырлай. ”Ашҡаҙар”, ”Әллүки”, ”Ҡара урман”, ”Буранбай”, ”Иҙелкәйем”... Борон-борондан быуындан-быуынға күсеп килгән илаһи моңдарыбыҙҙы тыңлап туйыу мөмкин түгел. Ә Фәриҙә апай башҡарыуында улар халҡыбыҙҙың киләсәккә илтер бай рухи хазинаһы булып һынлана, сөнки йырсы йөрәге, йырсы йәне аша үткән был йырҙар. Йырҙар ҙа, йырсылар ҙа бик күп. Ә

бына Фәриҙә Ҡудашева бирәү, ундағылай илаһи моң да бирәү генә. Моңло йырҙары менән күңелдәрҙе тетрәндереп, әсе күҙ йәштәрен түктереп илатҡан өсөн дә, беҙҙе моң даръяһында йөҙҙөргән өсөн дә рәхмәтлебеҙ Йырсыға.

”Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисткаһы Фәриҙә Ҡудашева — барлыҡ мосолман донъяһының, төрки иленең рухи ай-ҡояшы, барлыҡ моңло йырсыларҙың әсәһе һәм кендек әбейе. Фәриҙә Ҡудашеваһыҙ Башҡортостан — һандуғасһыҙ ҡарурман, сәскәһеҙ дала, шишмәһеҙ сүл ул. Фәриҙә апай — башҡорт һәм татар йырының моң алиһәһе”, — тип яҙғайны Замир Низаметдинов ”Татарстан йәштәре” гәзитендә.



*...Һарыла, йәнгә һарыла*
*Аңлатып булмаҫ һағыш.*
*Өҙә бит үҙәктәремде*
*Фиҙакәр, моңло тауыш!*
Хәсән Назар

Фәриҙә апайҙың ҡартатаһы Фәттәхетдин бабай ҙа матур йырлаған. Атаһының бер туған ҡустыһы Әхиәретдин иһә Келәш ауылында оҫта гармунсы, йырсы булып таныла. Атаһы Йәһүҙә лә матур йырлай. Әсәһе Рәхимә апай иһә үҙенең уңғанлығы һәм бик моңло тауышлы булыуы менән айырыла. Уның ҡул эшенә оҫталығы, кейем-һалым теккәндә лә, нағышлап сигеү сиккәндә лә моңло итеп көйләүе кескәй Фәриҙәнең йөрәк түрендә урын ала. Йыр һөйөүселәрҙең күңелен тетрәндергән ”Ашҡаҙар” йырын йырсы тап ошо мәлдәрҙә отоп ала ла инде. Әйткәндәй, был йырҙы Ҡазанда Нәҡи Иҫәнбәттең юбилей кисәһендә йырлағанда залда ултырған тамашасылар араһында тетрәнмәй ҡалған кеше булмай. Нәҡи ағай иһә илай-илай тыңлай.

Фәриҙә апайҙың ”Димдә тыуҙым, Димдә үҫтем, еләк йыйҙым туғайҙа”, тип йырлағаны һәр саҡ хәтерҙә. Ошо халыҡ йыры — уның асылы. Шишмә районының Келәш ауылы йәмле Дим буйында урынлашҡан. Эргәлә генә Аҡманай күле, тирә-йүндә ҡайын урманлы болон-туғайҙар. Фәриҙә апай күңелендәге моң даръяһы ошо ерҙән һут алып тулышҡан, хәтфә үләндәрҙең, төрлө төҫтәге ялан сәскәләренең гүзәллеген йыйған. Сал Уралдың яҡты яҙҙары, наҙлы йәйҙәре, алтын көҙҙәре, серле ҡыштарының хозурлығы бергә үрелеп, йырсы моңона сорналған. Фәриҙә апайҙың: ”Бәләкәй саҡта миңә һәр тарафтан йыр ишетелгән кеүек була торғайны”, — тиеүе тиккә генә түгел.

Ҡудашевтар Келәш ауылында борон-борондан килгән затлы һәм талантлы нәҫел һаналған. Фәриҙә апайҙың атаһы Йәһүҙә ағай ғаиләләрендә ун бер малайҙың иң өлкәне була. Бөтәһе лә эшкә уңған, шуға ла етеш йәшәйҙәр. Шул арҡала Ҡудашевтарға ”кулак” мөһөрө лә тағыла. Шулай ҙа ғәҙеллек өҫкә сыға. ”Бер айҙан урта хәлле крәҫтиәндәр, тип уларҙы аҡлайҙар, — тип хәтерләй Фәриҙә апай. — Атайымдың ғына ҡулына эш барманы, ғәрләнгәндер, күрәһең, ситкә сығып китергә булды”.

Бына шулай Фәриҙәгә Аҡманай буйҙарын ҡалдырып китергә тура килә. Бала саҡтағы тыуған яҡтан айырылыу тойғоһо хәтерендә оҙаҡ һаҡлана уның.

Улар Баймаҡ районына күсеп китәләр. Йыр-моңға бай был тарафтарҙың Фәриҙә апай күңелендә ҡалдырған матур эҙҙәре бар. Артабан Башсоюз сауҙа системаһында эшләгән атаһын Ҡыйғы, Дүртөйлө яҡтарына эшкә ебәрәләр. Һәр төбәктең үҙ хазинаһы, үҙ матурлығы, үҙ хәтирәләре. Әммә Ҡыйғыла йәшәгән мәлдәрен айырыуса онота алмай Фәриҙә апай. Бында йәшәгәндә 38 йәшендә генә әсәһе Рәхимә апай вафат була. 13 йәшлек кенә Фәриҙә ҡустыһы Радик, һеңлеһе Хөршиҙә менән етем тороп ҡалалар.

— Әсәйемдең үлеп ҡалғанын миңә имтиханда ултырғанда килеп әйттеләр, — тип хәтерләй Фәриҙә апай. — Аяҡ аҫтымда ер убылғандай булды. Етемлек хаҡында өлкәндәрҙән генә ишетеп белә инек, хәҙер үҙебеҙҙе ауыр хәсрәт баҫты. Әсәйемде ерләгәс тә, бәлки, тереләр, тигән өмөт һүнмәне. Һеңлем, ҡустым менән зыяратҡа барып, берәй тауыш килмәйме, әсәй беҙҙе саҡырмаймы икән, тип тыңлап тора инек.

Йылдар күңел яраларын дауалар өсөн үтәлер төҫлө. Фәриҙә тырышып уҡый, туғандарын да ихлас ҡарай. Етенсене тамамлағас, Өфө сәнғәт техникумына уҡырға инә. Техникумды тик "бишле"гә тамамлаған ҡыҙҙы Дүртөйлө театрына эшкә ебәрәләр. Күп тә үтмәй Өфөлә филармония асыла һәм Фәриҙәне шунда эшкә саҡыралар.

1941 йылдың йәйе. Өс айлыҡ ҡына бәпесен алып, гастролгә сығып китәләр. Һуғыш башланыуы тураһында хәбәрҙе Ейәнсура районының Муйнаҡ ауылында ишетә ул. Әлбиттә, йәш бала менән ат арбаһында соҡорлы-саҡырлы юлдарҙан ауылдан-ауылға йөрөүе бик ауыр була. Бәлә бының менән бөтмәй, академтеатрҙа эшләп йөрөгән Фәриҙәне "ҡыҫҡарталар". Ире һуғышта, йәш балаһы менән эшһеҙ тороп ҡала ул. Әммә ҡайһы ваҡыт бәхетһеҙлек бәхеткә лә илтә, тиҙәр. Тап ошо мәлдә уға ла яҙмыш йылмая: радиоға солистка итеп эшкә саҡыралар. Бына шулай уның моңло йырҙары бер-бер артлы радио эфиры аша йыр һөйөүселәргә юллана. Радиокомитетҡа: "Ошо моңло тауышлы йырсыны күргебеҙ килә", — тигән хаттар яуа. Һөҙөмтәлә төрлө тарафтарға гастролдәр башлана. Уны көтөп алалар, сәхнәнән сығармай йырлаталар, йырлап бөткәс, бөтә ауыл бергәләп оҙаталар.

*Ғүмерлек мөхәббәте*
*Бәхти Ғайсин*



Артабан яҙмышы Фәриҙәне үҙе кеүек моңға мөкиббән ғашиҡ кеше — Бәхти Ғайсин менән осраштыра һәм уларҙың өс тиҫтә йылдан ашыу ижади ғүмере башҡорт сәхнәһе күгендә пар йондоҙ булып балҡый. Бәхти аккордеонда (һуңыраҡ синтезаторҙа ла) уйнай, Фәриҙә йырлай... Күңелдәре тулы моң. Тап уның өсөн Бәхтие яҙған илаһи йырҙарҙы әле лә тулҡынланмайынса, хатта иламайынса тыңлау мөмкин түгел: "Ҡара ҡарлуғас микән" (Ә.Атнабаев һүҙҙәре), "Ниңә гелән, иркәм", "Төнгө Өфө" (Ш.Бикҡол һүҙҙәре), "Ике аҡҡош" (Ә.Баянов һүҙҙәре),

”Ҡара мыйыҡ” (Г.Зәйнәшева һүҙҙәре), ”Билдәһеҙ һалдат ҡәбере янында уйланыу” (Ғ.Афзал һүҙҙәре) һәм башҡалар.

Эйе, яҙмыш аяуһыҙ: Бәхтие менән парлашып сығыш яһауҙарын һағынып һөйләргә генә ҡалды. Берҙән-бер ҡыҙы Ренара ла ҡалдырып китте Фәриҙә апайҙы. Әммә бирешмәне йыр алиһәһе: ейәнсәре Славяна, уның балалары хаҡында уйлап йәшәй, күңел түрендә мәңгелеккә урын алған моң тынғылыҡ бирмәй уға, көрәшергә, йырлап йәшәргә мәжбүр итә.

— Тормош байтаҡ һынауҙар ҡуйһа ла, мин үҙемде бәхетле, тип иҫәпләйем, — ти Фәриҙә апай. — Йырҙарым халыҡ күңелендә йәшәй. Урамға сыҡһам, олоһо ла, кесеһе лә йылмайып сәләмләй. Бик матур, моңло йырҙар башҡара алыуым, ошондай йырҙар ижад иткән шағирҙар, композиторҙар быуыны менән бер заманда йәшәүемә бәхетлемен.



*Һәр бер йырың — беҙгә оло байрам,*
*Көслө рухы унда илемдең,*
*Ғорурлығы унда Уралтауҙың,*
*Гүзәллеге мәшһүр Иҙелдең.*
Дамир Ғарифуллин

Бер теләгем бар: йәштәр оло быуынды, уның күренекле шәхестәрен онотмаһын, йышыраҡ иҫкә алһын ине. Сөнки башҡорт әҙәбиәтен, сәнғәтен улар ижад иткән, тап улар әлеге кимәлгә күтәргән. Һәр береһе үҙе бер шәхес булғандары бихисап: Булат Ишемғолов, Дауыт Юлтый, Зәйтүнә Бикбулатова, Арыҫлан Мөбәрәков, Рим Сыртланов һәм башҡа бик күптәрҙе атап китергә булыр ине. Уларҙы онотоу беҙҙе генә түгел, беҙҙең сәнғәтебеҙҙе ярлыландыра. Халыҡ уларҙы яратҡан, йондоҙ итеп күтәргән икән, тимәк, улар балҡып торорға тейеш. Мин үҙем дә йырҙарымды үҙ иткән, яратып тыңлаған, мине көтөп алған тамашасыларыма рәхмәтлемен. Ошо хис мине ижадыма яуаплы ҡарарға мәжбүр итте. Йырҙы ысын күңелдән, сәнғәт әҫәре кимәлендә, дөрөҫ итеп йырлау — тәбиғи рәүештә йөрәгем аша үтеп сыҡҡан ижад емеше, тип уйлайым. Саф күңелдән йырларға тырыштым, минең булмышым шундай.

Бик күп абруйлы исемдәргә лайыҡ булған Йырсы. Татарстандың Тукай премияһы ла бирелгән. Шулай ҙа Башҡортостаныбыҙҙың иң юғары наградаһы — Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһының бирелмәүе йырсыны ла, уның ижадын һөйөүселәрҙе лә ғәжәпләндерә. Халыҡ йырҙарын иң күп, иң оҫта йырлаусы булараҡ, халыҡ батыры исемендәге премияға лайыҡтыр ул.

— Алты тиҫтәнән артыҡ ижад ғүмеремдә хәтерҙә ҡалырлыҡ, көлөп тә, көйөп тә һөйләрлек нәмәләр күп булды, — тип хәтерләй Фәриҙә Йәһүҙә ҡыҙы. — Элек Мәскәүҙә һәм Ленинградта башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре матур һәм юғары кимәлдә үтә торғайны. Шулай, баш ҡалабыҙҙа ”Россия” залында концерт башланды. Мин дә


*Ҡыҙы Ренара менән*

сығыш яһарға тейешмен, шуға, ғәҙәтемсә, бер сәғәт алдан килеп әҙерләнеп ҡуйҙым. Программа буйынса минең номер етергә байтаҡ ваҡыт бар әле, тип торһам, исемемдә иғлан иткәндәрен ишетеп ҡалдым. Зал тулы тамашасылар, көттөрөп булмай, сәхнәгә сығып баҫтым. Ҡараһам, оркестр урынында юҡ, бер торбасы ғына ултырып ҡалған. Ярай әле ул хәлде аңланы, мин йырлай башланым. Оркестр ҙа тиҙ арала йыйылды. Һәйбәт сыҡҡандыр, күрәһең, һуңынан бер егеттең: "Ну, һыҙҙыра Фәриҙә апай", — тип әйткәнен ишетеп, үтә лә ҡыуандым. Тағы шулай, Ленинград ҡалаһында әле яңы ғына асылған Октябрь залында сығыш яһайбыҙ. Бер ваҡыт йырлап торһам, сәхнә артында көслө шартлау тауышы яңғыраны. Әммә мин керпек тә ҡаҡмай йырлауымды дауам иттем. Ҡазанда иһә "Ҡыр ҡаҙы"н йырларға ғына тотонғайным, залда бер ханым үкһеп илай башланы. Күрәһең, йыр күңелен нескәрткәндер. Уны алып сығып киттеләр, ә мин, бер ни булмағандай, йырҙы бүлмәнем. Йырсы йырын аҙағынаса йырларға, һәр төрлө хәлдәргә лә әҙер булырға тейеш.

Талантлы йырсының заманыбыҙ йәштәре, әлеге осор йырсыларына мөнәсәбәте хаҡында белергә теләгәс, ул шулай тине:

— Талантлы йәштәр бар, әлбиттә, әммә уларҙың күбеһенең йырсы һөнәренә кәсеп, аҡса эшләү сараһы, тип ҡарауы борсоуға һала. Йыш ҡына: мин фәләнсә кассета, фәләнсә диск сығарҙым, тип маҡтанғандарын ишетергә тура килә. Әлеге лә баяғы Көнбайыш Европа, Америка йырсыларына эйәреү ҡамасаулай. Ысын ижадсы уларҙан нимәне ҡабул итергә, нимәне алмаҫка кәрәклеген тойорға тейеш. Сит ил йырҙарын башҡорт моңо менән сағыштырыу мөмкин түгел. Башҡорт йыры үҙенең тарихи асылы, милли колоритлы булыуы менән юғары. Йәштәргә ошоно һаҡларға кәрәк. Халыҡ йырын инҡар итеп, таҡмаҡ менән мауығыу йырсыға бәҫ өҫтәмәй. Әлегә үҙҙәрен ысын ижадсы, үҙенсәлекле йырсы итеп күрһәтеүселәр һирәк.

Әлбиттә, кешегә моң тыумыштан бирелә, халыҡ йырҙарын башҡарыу өсөн тәрән һулышҡа, киң диапазонға эйә булыу зарур. Халыҡ йырын еренә еткереп башҡара алған кеше генә йырсы булып китә ала. Мин үҙем ижадымды халыҡ йырҙарынан башланым. Әле 1-се синыфта уҡығанда "Һалҡын шишмә" тигән йырҙы башҡарғаным хәтерҙә. Минең репертуарҙа башҡорт һәм татар композиторҙарының йырҙары бик күп, әммә халыҡ йырҙары төп урын алып торҙо.

Эйе, халыҡ йырын халыҡҡа илтеүҙе изге бурыс тип иҫәпләй Фәриҙә апай. Уның һәр йыры, һәр сығышы көслө алҡышҡа күмелә, Советтар Союзын арҡырыға ла, буйға ла бер нисә тапҡыр йөрөп сыҡҡан талантлы йырсы һәр тарафта тик һөйөү, тәрән ихтирам яулаған, Башҡортостан менән Татарстан халҡы иһә уны үҙенең уртаҡ моң алиһәһе тип ҡабул иткән.

Башҡорт һәм татар халҡының яратҡан йырсыһы, һандуғасы булған Фәриҙә Ҡудашеваның концерттар менән Татарстанға, Ҡазанға килеүен йыр һөйөүсе тамашасылар һәр саҡ оло бер байрам кеүек көтөп ала. Үҙ сиратында Фәриҙә апай дуҫтары, төрлө талант эйәләре — Хәсән Туфан, Сибғәт Хәким, Сара Садиҡова, Нәҡи Иҫәнбәт, Ғүмәр Бәширов, Баҡый Урмансы, Әмирхан Еники һәм башҡалар менән осрашыуҙы, күрешеүҙе оло бәхет тип иҫәпләй.

Ғөмүмән, йырсы бәхете нимәлә? Был һорауға Фәриҙә апай ябай һәм аныҡ яуап ҡайтарҙы.

— Йырсы өсөн халыҡҡа хеҙмәт итеү, йыр-моңдарын кеше күңеленә еткереүҙән ҡәнәғәтлек алыу — иң ҙур бәхет. Йырлаған йырын үҙе бар күңеле менән яратҡан, асылын аңлап, шуны тыңлаусыға еткереү өсөн бар оҫталығын һалған йырсы ғына уңышҡа өлгәшә. Мин йырлағанда тамашасы менән әңгәмәләшкән кеүек инем.



*Ак пароход йөҙөп килә*
*Ағиҙел буйлап кына...*
Халыҡ йыры

Башҡортостан һандуғасы, йыр алиһәһе, сәхнә йондоҙо... Бик күп сағыштырыуҙар әйтелгән Фәриҙә апайға. Әммә ул тормошта элеккесә ябай, тәбиғи, ихлас, итәғәтле, дуҫтарына, ижадын ихтирам итеүселәргә тоғро. Бына 12 йыл рәттән Фәриҙә апай боронғо Булғар иленә сәйәхәткә бара.

— Беҙ бит теплоходта барабыҙ. Йылға ағышы тынысландыра, Ағиҙел буйы, Кама ярҙарының хозурлығы күңелдәрҙе күтәрә, — ти йырсы. — Ике йөҙләп кеше була унда. Булғарға барғанда — Дүртөйлөлә, Түбәнге Камала, ҡайтҡанда Ҡазанда, Яр Саллыла туҡталабыҙ. Концерттар, төрлө бәйгеләр ойоштorабыҙ. Элегерәк үҙем дә йыш йырлай инем, әле күберәк жюриға һайлап ҡуялар. Рухи һәм физик көс өҫтәй был сәйәхәттәр миңә.

Халҡыбыҙҙың быуаттар аша артылған ғәжәйеп моңдарын, башҡорт композиторҙарының илһамлы әҫәрҙәрен үҙенә генә хас илаһи моң һәм оҫталыҡ менән башҡарып, йыр даръяһының һоҡланғыс өлгөләрен юғары кимәлдә киләсәк быуындарға илткән мәшһүр йырсы Фәриҙә Ҡудашева үҙенә шундай мәғрүр һәйкәл һалды, уны йылдар ҙа, елдәр ҙә ҡаҡшата алмаясаҡ. Ошо мәлдә шағир Ирек Кинйәбулатовтың атаҡлы йырсыбыҙға арнап яҙған шиғыр юлдары иҫкә төшә:

Һинең йырҙы, һинең моңдо тыңлап,
Заман менән заман ҡауышыр,
Инәйҙәрҙән ейән-ейәнсәргә
Күсә барыр йөрәк тауышың...